Эссе

Хаклы ғорурланам(Ҡаһымдың үлеме).
Ер йөҙөндә кешене ағыулап үлтереүҙән дә ҙурыраҡ ғонаһ, яуызлыҡ бармы икән? Кеше үлтереү түгел, а уға зыян эшләү-оло ғонаһ! Бишенсе класта уҡығанда иң яратып уҡыған әҫәрҙәремдең береһе А.Карнайҙың "Урманда" хикәйәһе ине. Бөгөн был хикәйә уйланыуҙарыма этәргес көс бирҙе. Көнсөллөк... Фольгнер - алйырҙан, Ҡолтүбә - йылан. Улар икеһе лә тейендең "әллә ҡайҙа юғарыға менә алыуын яратмай". Улар икеһе лә ерҙән юғарыраҡ күтәрелә алмай, тик аҫҡа, түбәнгә генә төшә белә. Ғүмеренең күберәген ҡараңғыла үткәрә. "Дуҫыңдың кемлеген әйтһәң, үҙеңдең кем икәнеңде әйтермен" - ти халыҡ мәҡәле. Фольгнер - Ҡолтүбә, алйырҙан - йылан...

Батырлығы, кешелек сифаттары, тоғролоғо, етәкселек итә белеүе менән Ҡаһым түрә һуғышсылары, рус полководецтары араһында тиҙ һәм ҙур абруй яулап өлгөрә. Оло даны тыуған иленә, Башҡортостанына тарала. Ошо һыҙаттары, башҡарған ғәмәлдәре дошмандарын шундай фекергә алып килә: "Яҡшы аттың хәҙер кәрәге юҡ, асыуҙы ла байтаҡ килтерҙе..." Хәйләкәр Фольгнер Ҡолтүбә тарханды полк командиры буласаҡһың тип ымһындырып Ҡаһымға ағыу эсерергә күндерә. Ҡуштандар, көнсөлдәр, хәйләкәрҙәр, яла яғыусылар, ҡара эслеләр элек тә булған, хәҙер ҙә бар, улар буласаҡ! Тарих беҙгә үҙ һабаҡтарын бирә, киҫәктә, хаталарыбыҙҙы ҡабатламаҫҡа саҡыра. Алдар Иҫәнгилдин, Ҡараһаҡал, Батырша, Салауат Юлаев, Миңлеғәле Шайморатов кеүек иле, халҡы өсөн ғүмерен биргән батырҙарыбыҙҙың үлемендә лә күпме Ҡолтүбәләр ҡатнашты икән?

Батырҙарса үлеүгә, һәләк булыуға күп миҫалдар килтерергә була... Бына үлем алдынан дошманыңды аяу кеүек кешелек сифатына тик көслө-рухлы шәхестәр генә эйә. Ҡолтүбәнең алҡымын сәйнәп өҙөргә әҙер Аҡназарҙы ла Ҡаһым түрә : "Ҡуй," - тип туҡтата.

1812 йылғы Ватан һуғышына 28 полк төҙөп ебәргән халҡым менән ғорурланмау мөмкин түгел. Һуғышҡа 4139 иң яҡшы аттарын ебәргән илебеҙҙә ҡайһы төбәк бар? Яуабым ҡәтғи : ундай төбәк юҡ!

Уйҙарымдың осона сығып шуны әйтер инем : Ҡаһым түрә кеүек, беҙгә физик яҡтан ғына түгел, ә рухи яҡтан да көслө, берҙәм булыу кәрәк!

Из Заметок Honor